**Фәнни – тикшеренеү эше менән шөғөлләнеүсе уҡыусыларға кәңәштә, тәҡдимдәр**

**1.Тема һайлау.**

Фәнни-тикшеренуү эшенә тотонғанда тәүҙә ниндәй проблеманың хәл ителешен өйрәнергә теләк булыуын асыҡларға кәрәк. Көндәлек тормошта бөтәһе лә ғәҙәти, ябай, билдәле кеүек. Шул ябайлыҡта, ғәҙәтилектә ҡатмарлы, ҡаршылыҡлы, хәл ителергә тейеш булған мәсьәләнетабыу тикшеренеү эшенең темаһын билдәләргә ярҙам итә.Авторға теманы тормош үҙе күрһәтеп тора, йәғни ситуация үҙе бирә.Ләкин фәнни эш темаһы махсус һайлана. Ул мөмкин тиклем аныҡ, конкрет, тар булырға тейеш. Тар тема өйрәнеү ентеклелеге менән айырыла. Мәҫәлән, “Башҡортостан тәбиғәте” – киң тема, “Беҙҙең яҡтың шифалы үләндәре” – тар тема.

**2. Фәнни – тикшеренеү эшенең планын төҙөү.**

Фәнни – тикшеренеү эшенә тотонғансы, иң элек уның яҡынса планын төҙөргә кәрәк, сөнки был план тикшереү барышында бер нисә тапҡыр үҙгәрә, теүәлләнә, камиллаштырыла.

**План төҙөгәндә** “ Тикшерә торған мәсьәләне асыҡлау өсөн нимәләр эшләргә кәрәк?! – тигән һорауға яуап эҙләргә кәрәк. Түбәндәге методтар эш төрҙәренә байҡау яһап ҡарап сығыу пландың эҙмә-эҙлелеген, күләмен билдәләгәндә ярҙам итәсәк:

**а) үҙ алдыңа уйлау, фекер йөрөтөү.**

- Был тема тураһында мин нимә беләм?
- Ниндәй фекерҙәр әйтә алам?
- Белгәндәремдән сығып, ниндәй һығымта яһап була?

**б) тикшереләсәк тема буйынса китаптар, мәҡәләлә менән танышыу.**

- Быға тиклем был тема буйынса нимәләр яҙылған?
- Ниндәй аспекттары тикшерелгән?
- Нимәләр әле ҡаралмаған?

**в) кино – телефильмдар ҡарау.**

**г) Интернет селтәренән мәғлүмәт алыу.**

**д) кешеләрҙән һорашып, интервью алыу.**

**е) күҙәтеү.**

**3. Фәнни әҙәбиәт менән эш.**

- Әҙәби сығанаҡтарҙы дөйөм рәүештә байҡау яһап ҡарап сығырға, йөкмәткеһенә иғтибар итергә, файҙаланылған әҙәбиәт исемлегенә күҙ һалырға, иң мөһим тип иҫәпләгән тексты билдәләргә.
- Мөһим тип һанаған тексты яңынан уҡып сығырға, унын планын төҙөп, кәрәкле урындарын яҙып ҡуйырға.
- Бөтә йыйылған материалды тәнҡит күҙлегенән ҡарап сығып, үҙ фекереңде булдырырға.

**Материалды тәртипкә килтереү, ғилми – тикшеренеү эшен әҙерләү**

**Инеш өлөштә** проблеманың актуаллеге, тикшеренеү объекты, предметы билдәләнә. Артабан тикшеренеү эшенең маҡсаты, бурыстары ҡуйыла.

Тикшеренеү объекты – тикшереү, өйрәнеү өсөн алынған процесс йәки күренеш, ә тикшереү предметы - нимә тикшерелә, нимә өйрәнелә, шул була.

Маҡсат, бурыстарҙы билдәләү – Тикшеренеү эшенең маҡсаты йыйнаҡ, аныҡ булырға тейеш.

Төп өлөштә тикшерелгән проблема буйынса сығанаҡтарға байҡау яһала ( кемдәр ҡасан, нисек был мәсьәләне тикшергән) һәм эштең төп йөкмәткеһе асыҡлана

Йомғаҡлау өлөшөндә алдағы билдәләнгән бурыстарҙың нимәләр һөҙөмтәһендә хәл ителеүе хәбәр ителә.

Һығымталар ҡуйылған маҡсатҡа ирешеү – ирешмәүҙе сағылдырырға тейеш.

Шулай итеп, фәнни эш менән шөғөлләнеүҙә маҡсат, бурыстар, һөҙөмтә, һығымта, тикшереү тәртибе, методтар үҙ ара логик бәйләнештә була һәм яҙғанда ла билдәле бер тәртиптә бирелә.

Белем көсө тауҙар аҡтара, ғилеме бар бер ҡайҙа ла юғалып ҡалмай, киләсәк тә ышаныслы була.

Йомғаҡлап, Р. Фәхретдиновтың тәрән мәғәнәле “ Һәр ваҡыт ғилемгә мөхәббәт һаҡлағыҙ. Һәр бер ғилемдең күркәм булғанын белегеҙ” тигән һүҙҙәрен әйтке килә.